Ата-әсәләргә файҙалы кәңәштәр

1. Бала менән дөрөҫ мөғәлләмә итеү кәрәк. Эш ҡушҡанда асыу, ҡысҡырыу, ярһыу ҙа, инәлеү ҙә булырға тейеш түгел. Эш үтәлешен тикшереү ҙә мөһим. «Һин эшләй алаһыңмы ни?», «Һинән булмаҫ!»кеүек кәмһетеүҙәр баланың үҙ баһаһын кәметә, үҙенә ышаныу көсөн юҡҡа сығара. Балағыҙҙың уҡыған китабы, ҡараған кинофильмы, мәктәп тормошо тураһындада ҡыҙыҡһынығыҙ.

2.Эшһеҙлек- ялҡаулыҡтың, бәхетһеҙлектең нигеҙе. Шуға күрә баланың һәр көн башҡара торған эштәре булырға тейеш (почта индереү, сүп түгеү, иҙән һепереү, һауыт-һаба йыуыу,ҡар көрәү һ.б.)

3. Пунктуаль булырға өйрәтегеҙ. Балағыҙ мәктәптән һуңламаһын, унан ваҡытында ҡайтһын.

4. Балағыҙ алдында Бер ҡасан да мөнәсәбәттәрегеҙҙе асыҡламағыҙ, ыҙғышмағыҙ.

5. Уҡыуҙы ыҙаға әйләндермәгеҙ. Насар тәртип өсөн математиканан өҫтәлмә эштәр эшләргә, инша яҙырға мәжбүр итмәгеҙ.

6. Балағыҙҙы артыҡ ҡурсаламағыҙ, унда үҙаллылыҡ тәрбиәләргә тырышығыҙ.

7. Ололарҙы ололарға, кеселәрҙе кеселәргә өйрәтегеҙ.Йәмәғәт урындарында балағыҙ менән бергә булһағыҙ,үҙегеҙ белгән нәмәләр менән таныштырығыҙ. Мәҫәлән, автобустарҙа ололарға урын биреү, юлда уларҙы алдан уҙғарыу һ.б.

8.Бала алдында гәп һатҡанда кемделер яманларға ярамай. Сөнки балала шул кешегә ҡарата насар ҡараш тәрбиәләнә.

9.Сәләмәтлекте, һаулыҡты нығытыу мотлаҡ. Балағыҙ һау-сәләмәт булһа ғына, уҡыуы ыңғай барасаҡ.

10. Гигиена талаптарын үтәргә өйрәтеү,бөхтә кейенергә, тырнаҡтарын ҡырҡырға, мунса инергә һ.б. өйрәтеү кәрәк.

Ғаиләлә ата-әсә өсөн иң мөһиме -баланынң кеше булып үҫеүе. Халҡыбыҙ был теләкте үҙенең мәҡәл-әйтемдәрендә сағылдыра килгән. Бына уларҙың бер нисәһе.

Татыу ғаилә – ил күрке.

Кесегә мәрхәмәт ит, олоға итәғәт ит.

Ҡартты ҡәҙерләһәң, ҡартайғас ҡәҙер күрерһең.

Ололарҙы ололау – яҡшылыҡтың билдәһе.

Бер олоноҡон тыңла, бер кесенекен тыңла.

Ҡояш янында - йылылыҡ, әсә янында - изгелек.

Малайға тәрбиә биреп - ил тәрбиәләйһең, ҡыҙға тәрбиә биреп - милләт тәрбиәләйһең.

Ағаһын күреп, ҡусты үҫер, апаһын күреп, һеңле үҫер.

Ир бала атаһына таяу, ҡыҙ бала өй эсендә буяу.

Бала итәктә һөйҙөрә, итәктән төшһә - көйҙөрә.

Улың булһа, олоҡло менән күрше бул, ҡыҙың булһа, ҡылыҡлы менән күрше бул.

Әсәһенә ҡарап ҡыҙын ҡос, атаһына ҡарап улын ҡос.

Әсәй - ҡаҙна, атай – еҙнә.

Ҡыҙы барҙың наҙы бар.

Ҡыҙлы йорт – нурлы йорт.

Ул – һөйөнөс, ҡыҙ – ҡыуаныс.

Ҡыҙҙар ярата йылы һүҙ, ҡаты әйтмә, егет,түҙ.

Иреңдән айырылғансы күкрәгеңдәге йәнеңдән айырыл.

Ирҙе ир иткән дә, хур иткән дә — ҡатын .

Ҡатынынан айырылғандың ҡанаты ҡайырылған .

Ҡатын уңғаны иргә яраған, ир уңғаны илгә яраған.

Бала - ата-инәгә алтын бағана. Бала ҡәҙерен әсә белер, ил ҡәҙерен ир белер.

Бала күрмәгән - балдан ауыҙ итмәгән.

Баланан бәхетең булһа - ҡарт көнөңдә йәш итер,

Баланан бәхетең булмаһа - иртә йәштән ҡарт итер.

Ҡыҙ байлығы - күркәм холоҡ, ир байлығы - тәүәккәл.

Ҡыҙ егеткә ҡушыла - ебәк булып ишелә.

Ҡыҙ күңелендә — балалы бишек, ир күңелендә — эйәрле ат.

Ҡыҙ оҙатҡан яланғас ҡалыр, килен алған түренә урын һалыр.

Ҡыҙҙың кемлеге кемәйенән (әхирәтенән) билгеле.

Ҡыҙыңды үҙеңдән түбәнерәккә бир, киленде үҙеңдән юғарыраҡтан ал.

Үҙеңдең кем икәнлегеңде белгең килһә, көҙгөгә түгел, балаңа ҡара.

Бала күңеле – уңдырышлы тупраҡ, ни сәсһәң, шуны урырһың.

Тәртиптең әсәһе – тәрбиә.

Ояһында ни булһа, осҡанда ла шул булыр.